❒ Динебеҙ, еребеҙ

ӘМИНӘ ИНӘБЕҘ ҺӘМ ПӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘҘЕҢ ҺӨТ ИНӘҺЕ ХӘЛИМӘ

Мәккә ҡалаһы - Фәрәп ярымутрауындағы Һиджаз өлкәһендәге боронғо ҡала. Ҡаланың тарихы Әҙәм ғәләйһиссәләм заманынан баш ала, сөнки тап ошонда уның тарафынан берҙәнбер Аллаға табыныр тәүге ғибәҙәтхана - Ҡәғбә төҙөлә. Нух пәйғәмбәр осоронда туфан ҡалҡып, тәүге ҡала һыу аҫтында юғала һәм, Һәжәр Инәбеҙ улы Исмәғил менән шул урынға килеп юлыҡҡансы, әҙәми затҡа асылмай.

Белеүебеҙсә, зәмзәм һыуы ҡалҡып сыҡҡас, әсә менән бала янына Йәмәндең джүрһүмит ырыуы каруансылары килеп юлыға һәм улар затынан алған ҡыҙ менән Исмәғилдән ер йөҙөнә ғәрәп милләте тарала.

Ибраһим пәйғәмбәргә Аллаһы Тәғәлә тәүге Ҡәғбә булған урынды әшкәртә һәм тап шул урында аталы-уллы ғибәҙәтхананы тергеҙеп тә ҡуя. Һижрәгә (тәүге мосолмандарҙың Мәҙинәгә күсеү ваҡытына) тиклем 415 йыл элек джүрһүмиттәрҙе йәмәндәрҙең хузаға ырыуы ҡыҫырыҡлап сығара, әммә улар Исмәғил тоҡомдарына теймәй. Хузағалар төрлө һындарға (балбалдарға) табына. Пантеондарының башлығы Һубал аталмыш була. Алланы берҙән-бер тип белгән Ибраһим диненә бик әҙҙәр генә тоғро ҡала.

Һижрәгә 182 йыл ҡалғанда көрәйеш ырыуы башлығы Күсәй хузағаларҙы еңеп, иң дәрәжәле 10 кешенән торған ҡала идаралығы төҙәй. Көрәйештәр ҙә мәжүси инаныста була, әммә төрлө аллаларҙың иң ҙур башлығы бар тип һанай. Ибраһим пәйғәмбәр өйрәтеп ҡалдырғанса хаж ғәмәле үтәйҙәр, әммә Ҡәғбә тултырып балбалдар баҫтырып ҡуялар.

Ҡәғбәтулланың асҡысы Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһи үә сәлләмдең ата-бабаларында һаҡлана, тап ошо тоҡом ғибәҙәтхананы тәртиптә тота, хаж ғәмәлен ойоштора. Был уларҙың Хашим ҡушаматлы олаталарынан быуындан-быуынға тапшырылып килә. Риүәйәттәрҙән аңлашылыуынса, ҡушамат йот йылында изге был заттың үҙ иҫәбенә Фәләстиндан (Палестина) ризыҡ алып ҡайтып, кешеләрҙе ас үлемдән ҡоткарып ҡалыуы айҡанлы бирелгән (хәшәмә - бүлеү, турау, йәғни, икмәкте ашҡа турау мәғәнәһендә).

Хашим баҡый донъяға күскәндән һуң вазифа ҡустыһы Мотталипҡа күсә, әммә ул бер нисә йылдан мәрхүм ағаһының Мәҙинәлә йәшәгән берҙән-бер улы Шәйбәне Мәккәгә алып ҡайта ла бурыстарын уның елкәһенә һала. Тап шуның өсөн дә Шәйбәне Ғәбд әл-Мотталип, йәғни, Мотталиптың ҡоло тип атап йөрөтә башлайҙар.

Мосолмандар бөгөнгәсә зәмзәм һыуынан ауыҙ итә алыуы өсөн Ғәбд әл-Мотталипҡа рәхмәтле булырға тейеш, сөнки сығанаҡ туфан ҡалҡҡан осорҙа ләм аҫтында күмелеп ҡала. Изге шишмәнең урыны Аллаһ тарафынан Рәсүлебеҙҙең олатаһына әшкәртелә һәм балбалдарына ҡорбан салып, мәжүсиҙәр сүпкә, тиҙәккә батырған урынды тап ул таҙартып, ҡоҙоҡ ҡаҙый. Рәсүлебеҙҙең олатаһына шулай уҡ шишмәнең Исмәғил ғәләйһиссәләм шәхесе менән бәйле икәнлеге лә хәбәр ителә. Ғәбд әл-Мотталиптың 10 улы доньяға килеп, Ғабдулла исемлеһе иң яратҡаны була. Мәккәлә көрәйештәрҙән Бану-Зөһрә тип аталған зат-ырыу тоҡомдары иң дәрәжәлеләрҙән һанала. Ошо аранан Баһаб ибне Әбү Манаф исемле абруйлы кешенең ҡыҙы Әминәне әйттерә Ғәбд әл-Моталип улы Ғабдуллаға.

Уларҙың ҡушылған кисен, йәғни, зәфаф кисәһен мосолмандар рәжәп айының тәүге йомаһында күренекле байрам итеп билдәләй һәм "рәғәиб" тип аталған был кистә бик күп доғалар уҡып. Аллаһы тәғәләнән гонаһтарҙы ярлыҡауҙы үтенә, тәүбә итә.

Пәйғәмбәребеҙҙең биографияһын теркәүселәрҙең хәҡиҡәткә иң яҡыны тип һаналған авторҙарҙан Ибн Хишамдың яҙмаларында билдәләнеүенсә, буйында булғанын белгәс, Әминә Инәбеҙ хикмәтле төш күргән. Имеш, ниндәйҙер рух тыуасаҡ баланың үҙ милләтенә баш буласағын әйткән һәм уны көнсөлдәрҙән, яман әҙәмдәрҙән һаҡларға ҡушҡан. Исеме Мөхәммәт булырға тейешлеген белдергән.

Тиҙҙән Пәйғәмбәребеҙҙең атаһы сауҙа эштәре менән Сүриәгә йүнәлгән, әммә Мәҙинәгә еткәс, ҡаты ауырып китеп, 25 кенә йәшендә шунда гүр эйәһе булған.

Әйтеүҙәренсә, Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмде әсәһе фил йылында рәбиғәл әүүәл айының ун икеһендә, шишәмбе көнөндә ҡулына ала. Улын биләп һалғас, әсәһе уның Ғәбд әл-Мотталип олатаһына хәбәр иттерә, хикмәтле төшөн һөйләп бирә. Олатаһы малайҙы алып, Ҡәғбәтуллаға йүнәлә һәм Аллаһы Тәғәләгә рәхмәттәрен әйтеп, бәпесте төштә әйтелгән исем менән нарыҡлай.

Һөйөклө ирен юғалтыу ҡайғыһы, доньяға сабый бүләк итеү көсөргәнеше, етмәһә, йылдың ифрат ҡоро килеүе арҡаһындағы яфалар йәш ҡатынды өҙлөктөрә. Олатаһы ейәненә һөт инәһе эҙләй башлай.

Рәсүлебеҙҙе Сәғәдиә ибне Бәкер ырыуынан Хәлимә исемеле ҡатынға тапшыралар. Сабыйҙы үҙ әсәһеләй мөхәббәт менән баҡҡан был аҫыл заттың балалары уға һөттәш туған булып сыға. Бына улар: Абдулла ибн әл-Харис (йәғни, Харис улы), Үнәйсә бинт әл-Харис (Харис ҡыҙы) һәм әш-Шәймә ҡушаматлы Һизәмә бинт әл-Харис. Ҡушамат "аҡ йөҙлө" тигәнде аңлата. Белеүбеҙсә, динебеҙҙә һөттәш балалар яҡын туған тип иҫәпләнә һәм үҙ-ара өйләнешә лә алмай. Хәҙер инде илебеҙҙәге бала табыу йорттарында доньяға килгән сабыйҙарҙы күҙ алдына килтерәйек. Уларҙы бит ҡайһы саҡ төрлө сәбәптәр арҡаһында бер нисә көн әсәһенә имеҙергә бирмәй, шунда яткан ҡатындар тапшырған һөттө эсереп тоталар ине...

Ибн Хишамдың яҙмаларынан күренеүенсә, бала ҡулына нисек килеп юлыҡҡанын ул ошолай һөйләп ҡалдырған:

Ул йылы илгә йот килде һәм беҙ бер нәмәһеҙ ҡалдыҡ. Һөтөм ҡороно, төндәр буйы ас сабыйыбыҙҙың илауынан йоҡлай алмай сыға инек. Ҡарт дөйәбеҙ ҙә һыуалды, етмәһә. Аслыҡтан ҡотолор өсөн сараһын эҙләп. Мәккәгә сығып киттек. Имеҙергә бала алып, хаҡына йән аҫрарға ҡарар иткәйнек. Мөхәммәттән юлдаштарым менән тотош баш тартып бөттөк, атайһыҙ икәнен белгәс, олатаһы менән әсәһе нимә генә бирә ала инде, тип уйланыҡ. Мин уны-быны уйлағансы, әхирәттәрем Мәккә сабыйҙарын таратып алып та бөткән. Бер үҙем балаһыҙ ҡалдым, Мөхәммәтте лә бер кем дә алманы. Кешеләр ҡайтырға йыйынды, буш ҡул менән ҡайтмаҫ өсөн алдым инде теге сабыйҙы. Аллаһ бер ярҙамын бирер әле, тип уйланым. Ирем дә хупланы.

Бәпесте туҡтаған еребеҙгә алып килдем, ишәгемә атланып, итәгемә сабыйҙы һалыуым булды, түшемә һөт төштө. Туйғансы имде бала, үҙемдең улым да кинәнде. икәүләп рәхәтләнеп йоҡлап киттеләр.

Ирем ҡарт бейәгә атланғайны, ҡараһа, уның да елененә һөт тулған. Шуны һауып, туйғансы эстек. Ниһайәт, тыныслап төн үткәрҙек. Иртән торғас, ирем әйтә: "Биллаһи, Хәлимә, беҙ ҡотло бала алғанбыҙ", - ти.

Ҡайтканда ишәгебеҙҙе башҡалар ҡыуып етә алмай, килгәндә беҙ улар артынан саҡ өлгөрә инек. Ғәжәп иттеләр.

Ҡәбиләбеҙҙең үләне ҡалмай короғаны еренә ҡайтып еткәс, мөғжизәләр йәнә дауам итте. Һарыҡтарыбыҙ бүтәндәрҙеке менән бергә йөрөй, минекеләр елен тултырып һөт алып ҡайта, тегеләрҙекенән бер тамсы ла һығып сығара алмайҙар. Мөхәммәткә ике йәш тулып имсәк ташлатҡансы шулай дауам итте. Ике йәшендә бала дүрт йәшлек кеүек күренә ине. Теләмәһәк тә, уны әсәһенә ҡайтарыр ваҡыт етте. Мәккәлә ауырып китеүе бар, тип беҙҙә ҡалдырырға саҡ күндерҙек уны.

Әммә уны алып ҡайтып, бер нисә ай үтеүгә ғәжәп бер хәл булды. Мөхәммәт менән минең улым өй артында бәрәс көтөргә сыҡҡайнылар. Бер мәл улым ҡото осоп йүгереп килеп инде лә:

- Әсәй, көрәйш туғанымды аҡ кейемле ике ир тотоп алды ла ойпалай башланы, - тип ҡыҫҡырып ебәрҙе.

Ирем менән тиҙ генә шунда йүгерҙек. Ҡараһаҡ, бала ап-аҡ булып баҫып тора.

- Нимә булды, улым? - тием.

Яуабы беҙҙе шаҡ ҡатырҙы:

- Аҡ кейемле ике ир килеп, ергә һалдылар ҙа, әсемде ярып, нимәлер эшләнеләр.

Күп йылдар үткәс, Рәсүлебеҙ сәхәбәләренә шул саҡта әсен ярғас, йөрәген телеп, ҡара ҡан сығарып, таҙартыуҙарын һөйләй.

Һөт инәһе менән уның ире хафаға төшә һәм ҙур ҡазаға юлыҡмаҫ элек, малайҙы ҡайтарып ҡуйырға була.

Әминә Инәбеҙ был хәлгә аптырай, сөнки яңы ғына бик инәлеп, баланы кире алып ҡайтып киткәйнеләр бит. Тегеләр дөрөҫөн һөйләмәгәнен һиҙеп, ул һорау бирә:

- Әллә бер-бер ен-шайтан хәүефенән ҡурҡтығыҙмы?

- Эйе.

- Ҡурҡмағыҙ, ен-шайтан уның алдында көсһеҙ. Уның ниндәйҙер илаһи ҡеүәте бар. Буйға уҙғас, минән ниндәйҙер нур сыҡты ла унда Сүриәләге Бүсрә ерендәге зиннәтле һарайҙар сағылды. Йөгөм дә бик еңел булды. Доньяға килгәс үк сабыйым башын күтәреп күккә ҡараны. Шуға күрә хафаланмай ғына ҡалдырып ҡайт.

Баланы ҡайтарыуҙың йәнә бер сәбәбе булған тигән риүәйәт тә бар. Әминә Инәбеҙҙе өгөтләп баланы кире алып ҡайтып барғанда уларҙың юлында бер нисә нәсрани хәбәш (эфиоп) осраған. Улар малайҙы күреп ҡалыу менән ентекләп һораша, әйләндереп-тулғандырып ҡарай башлаған. Шуннан үҙҙәре менән бергә ебәрергә өгөтләргә тотонғандар. Беҙ уның серен беләбеҙ, ул ябай бала түгел, тигәндәр. Хәлимә Мөхәммәтте алып, саҡ ҡасып ҡотолған.

Улына алты йәш тулғанда Әминә Инәбеҙ уны туғандарына күрһәтер өсөн Мәккә менән Мәҙинә араһындағы әл-Әбүә тигән ергә ҡунаҡҡа барған. шул сәфәренән Мәккәгә ҡайтҡанда ҡаты ауырып китеп вафат булған.

Үкһеҙ етем ҡалған Мөхәммәтте бер нисә йыл олатаһы, ул вафат булғандан һуң олатаһының улы ҡараған.

Атаһын бөтөнләй күрмәгән, әсә наҙынан кескәйҙән мәхрүм ҡалған нарасый, әлбиттә, ғүмере буйы уларҙы юҡһына. Хәҙистәрҙән уның мосолмандарҙан ата-әсәгә хөрмәтле булыуҙы талап итеүе асыҡ күренә. Бына бер иҫтәлек:

Кемдер Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдән: "Әй Рәсүлуллаһ, әҙәмдәрҙән кем иң яҡшы мәнәсәбәтемә лайыҡ?" - тип һораған. "Әсәйең", - тигән Рәсүлебеҙ. "Унан ҡала кем?", "Әсәйең", "Унан ҡала кем?", "Әсәйең", "Унан ҡала кем?", "Атайың".

Был хәҙистән күренеүенсә, Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм әсәйҙәрҙе атайҙарға ҡарағанда өҫләтә нығыраҡ кәҙерләргә ҡушҡан.

Ҡөрьән Кәримдә шулай уҡ әсәләргә төшкән ауыр вазифалар тураһында иҫ киткес йомшаҡ һәм наҙлы һүҙҙәр менән телгә алына.

РАББЫБЫҘ СИФАТТАРЫНЫҢ БӨЙӨКЛӨГӨ

Аллаһ - Унан башҡа (табынырға лайыҡлы) илаһ юҡ, (Ул) Тере, Мәңге. Уны йоҡомһорау ҙа, йоҡлау ҙа алмай. Күктәрҙәге, ерҙәге бөтә нәмә - Уныҡы. Кем һуң Уның алдынан Уның рөхсәтенән тыш яҡлаша алыр?! Уларҙың киләсәктәрен дә, үткәндәрен дә белә Ул. Белемдән улар Ул теләгән хәтле генә белер. Уның Тәхете күктәрҙе лә, ерҙе лә биләй. Шуларҙы һаҡлау Уға һис тә ауыр түгел. Ул Бөйөк, Олуғ. *(Изге Ҡөрьән, 2 - Бакара ("һыйыр") сүрәһе 255 аят).*

Пәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтеүе буйынса, был - Ҡөрьәндең иң бөйөк аяттарынан, сөнки ул тәүхидте (Аллаһҡа ғына табыныуҙы) һәм Раббыбыҙ сифатарының бөйөклөгөн, сикһеҙлеген раҫлай.

Аллаһ бөтә илаһи сифаттарға эйә, һәм Уға ғына табыныуға тейешбеҙ, шуға ла башҡа берәүҙе илаһилаштырыу - ул файҙаһыҙ золомлоҡ.

"Әл-Хәййү" - (Тере) - Аллаһ Тәғәләнең гүзәл исемдәренең береһе. Аллаһ үҙ эсенә йәшәүҙең иң матур билдәләрен, улар араһында - ишетеү, күреү, көс-көҙрәт, ихтыяр һәм Уның асылы менән бәйләнгән башҡа сифаттарҙы алыуын аңлата ул.

"Әл-Ҡәйүм" - (Йәшәүгә булышлыҡ итеүсе) - Аллаһ Тәғәләнең был гүзәл исеме Уның иң камил ғәмәлдәр ҡылыуын аңлата. Ул Етешкән Хаким - мәхлүктәренә (Ул барлыҡҡа килтергән заттар) мохтаж түгел, әммә уларҙы барлыҡҡа килтереп, йәшәү шарттарын булдырып, уларҙың йәшәүенә булышлыҡ итеп тора. Аллаһтың камил йәшәйеше, етешкәнлеге Уны бер ҡасан да йоҡомһорау ҙа, йоҡлау ҙа алмауында сағыла. Был хәлдәр мәхлүктәргә хас, сөнки арыу, көсһеҙлөк - мәхлүктәрҙең генә һыҙаты. Бөйөклөккә, оло көҙрәткә, сикһеҙ матурлыҡҡа эйә булған Аллаһ өсөн иһә был бөтөнләй ят.

Ер-күк өҫтөнән хакимлыҡ Уныҡы ғына, тип хәбәр иткән Аллаһ. Бөтә мәхлүктәр - Аллаһтың ҡолдары, уларҙың береһе лә был ҡоллоҡтан ҡотола алмаҫ. Аллаһ Тәғәлә әйткән бит: "Күктәр һәм ерҙәге һәр кем әр-Рахмәнгә фәкәт ҡол булып ҡына килер" *(19:93).*

Аллаһ Үҙенең ҡолдарына тулыһынса хужа, сикһеҙ хакимилыҡҡа, оло көҙрәткә, бөйөклөккә һәм башҡа ысын Хаким, батша сифаттарына эйә. Уның алдынан рөхсәтенән тыш бер кем дә шәфәғәт итә алмауында хакимлығының камиллығы күренә. Бөтә дан ҡаҙанған заттар һәм яклаусылар Уның ҡолдары ғына, Аллаһ рөхсәт итмәйенсә улар башҡаларҙы яклай алмаҫ. Аллаһ Тәғәлә әйткән: "Әйт: "Яклау тотош - Аллаһтыҡы. Күктәр һәм ер өҫтөнән хакимлыҡ Уныҡы ғына. Һуңынан һеҙ Уға ҡайтарылырһығыҙ!" *(39:44).*

Аллаһ тәүхид тотоп, Уның пәйғәмбәрҙәре юлынан барыусылар менән генә ҡәнәғәт, улар өсөн генә шәфәғәт итергә рөхсәт итә. "Бел" - был бойороҡ, әмер! Беҙ әле үк, ошо минутта уҡ шаһитлык килтерергә тейешбеҙ: "Лә иләһә илләллаһ, Мөхәммәдү рәсүлүллаһ". Ошо һүҙҙәр менән йөрәгенде тултыр, телең был һүҙҙәрҙе һәр ваҡыт ҡабатлап йөрөһөн, уны бер ниндәй тоткарлыҡһыҙ әйтергә өйрәнһен. Үлер алдынан ла телең һәм йөрәгең ошо бөйөк һүҙҙәрҙе бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ әйтә алғандай булһын! Пәйғәмбәр (саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Кемдең һуңғы һүҙҙәре булып "Лә иләһә илләллаһ", әйтелер, шуның урыны - ожмахта", - тип.

Һәр ваҡыт "Лә иләһә илләллаһ" тигән һайын беҙ ожмахтарға тағы ла нығыраҡ яҡынаябыҙ, иншәллаһ. Аллаһ беҙҙе лә, һеҙҙе лә яклап, һаҡлап тора. Йә Аллаһ, беҙҙең йәшәү рәүешебеҙ ошо "Лә иләһә илләллаһ" булһа ине, беҙҙең һуңғы һүҙҙәребеҙ ҙә ошо "Лә иләһә илләллаһ" булһа ине! Аллаһү әкбәр!